***Риф ӘХМӘҘИЕВ,***
***филология фәндәре докторы***

# Тыуған ер йылыһы һәм шағир ихласлығы

**(Р. Хәкимйәндең ”Көҙгө урман” китабына бер ҡараш)**

Радик Хәкимйән. Өлкән ҡәләмдәшем. Яҡташым. Алдымда уның ”Көҙгө урман” исемле китабы. Быға ҡәҙәр шағирҙың һигеҙ йыйынтығы донъя күргән. Әлегеһе 2006 йылда нәшер ителгән. Йыйынтыҡҡа һуңғы осорҙа матбуғатта баҫылғандары ла индерелгән. Бының шулай булыуы бик тә тәбиғи. Сөнки өр-яңы әҫәрҙәр менән бергә, элегерәк ижад ителеп, билдәлелек алғандарын урынлаштырыу авторға, беренсенән, китаптың концепцияһын булдырыуға, икенсенән, ижадындағы тыуған ер, тыуған төйәк кеүек төп теманы артабан үҫтереүгә булышлыҡ иткән. Өсөнсөнән, был осраҡта лирик геройҙың статусы, кисерештәр динамикаһы, рухи-әхлаҡи эволюцияһы шаҡтай тулы булып күҙ алдына баҫа. Бындай лирик герой — иленең, Башҡортостандың патриоты, тыуған яғының тоғро улы. Авторҙың тыуған төйәгенә, уның кешеләренә булған һөйөүе, йылы мөнәсәбәте әҫәрҙәренә орлоҡ булып төшөп, сағыу поэтик үҫентеләрен бирә.

Ғәҙәттә, шағирҙар тыуған ерен, тыуған төбәген Әсә образы менән ассоциациялаштыра. Был — электән килгән традиция. Р.Хәкимйән иһә уны үҙенсә поэтиклаштыра — уҡыусы күңеленә ул сабый һынында һеңеп өлгөрә. Мәҫәлән, ”Тыуған яҡтарға ашҡынам” әҫәрендәгесә:

Имәнтау итәктәрендә
Нурланып таңдар ата.
Аҡ томанда — аҡ биләүҙә
Ауылым — Ҡыйғы ята.

Р.Хәкимйәндең иң иҫтәлекле, иң матур шиғырҙары йәнтөйәге тураһында. Улар тыуған яғына поэтик һәйкәл булырлыҡ! Бына шундайҙарҙың бер нисәһе. ”Бар хәстәрем” шиғыры:

Бында тыуҙым, бында үҫтем.
Минең китер ерем юҡ.
Башҡортостан — тыуған илем,
Минең башҡа илем юҡ!
.........................................
Туғандарға, балаларға,
Барыһына һин — оя,
Шуға ла бит тыуған ерҙе
Күңелем изге тоя!

”Тыуған яҡтарым, яҡташтарым” шиғырында автор йәнләндереү алымын ҡулланып, сағыу күренеш, панорамалылыҡ тыуҙырыуға ирешкән:

Беҙҙең яҡта урман, урман
Офоҡтарға тоташҡан:
Көмөш һыулы шишмәләре
Сафлыҡ ала ҡояштан!

Шағир үҙ йөрәгенә бөтә донъяны һыйҙырған шикелле, уның һөйөүенең аныҡ исеме, географик урыны бар. Ул да булһа, Үрге Ҡыйғы ауылы, уның тирә-яҡ тәбиғәте, Кәжигер тауы:

Кәжигерҙең түбәһенән
Зәңгәр күккә осҡанмын,
Ерем миңә ҡанат ҡуйған,
Бар донъяны ҡосҡанмын.
.............................................
Һағынып ҡайтыр бергенәм һин,
Саф хисем, яҡты тойғом.
Донъялағы иң изге ер —
Ауылым — Үрге Ҡыйғым!

Ошо төйәктән айырылып тороу, әлбиттә, шағирҙы уйға һалмай ҡалмаған: ”Бында йәшәү еңел булмаһа ла, тыуған ерҙе ташлап булмай ул”. Шулай икән, авторҙың тыуған яғын ”сюрприздар иле” тип атауында хаҡлыҡ юҡ түгел. Шул ерҙә көн күргән яҡташтары хаҡында әйтмәһә, шуларҙың ғәйрәтен, фиҙакәрлеген йырламаһа, авторҙың яҙғандары ялған риторика, субъектив фекер көйөнсә ҡалыр ине. Уға ауылдаштары араһында таң ҡаршылауы (”Таңды ҡаршылау”), урман моңон тыңлауы (”Урман юлы”), тәбиғәттең уяныуын күҙәтеүе (”Һағыныу”) бик тә рәхәт. Бында, яҡташтарының күңеле кеүек, ”тирә-яҡҡа нурҙар һибә аҡ ҡайындарҙың туҙы” (”Тыуған яҡта осрашыуҙар”). Ышандыра был юлдар. ”Һағыныу” шиғыры ла шундайҙар иҫәбендә.

Лирик шиғырҙар менән бер рәттән, ”Көҙгө урман” йыйынтығында эпик ҡоласлы һәм драматик фекерҙәрҙән тыҡылған әҫәрҙәрҙе лә осратып була. Мәҫәлән, ”Уралтауҙа уйланыуҙар”, ”Әй, тыуған ер”, ”Яҡты нур булып ҡалдың” шиғырҙары. Шуларҙың ҡайһы береһен поэма итеп ”үҫтереп” тә булыр ине.

Әммә шағир күңеле, нисек кенә булмаһын, иң тәүҙә эмоциональ, көсөргәнешле мәлдәрҙең тәьҫиренә бирелеүсән. Былдай нюанс Р.Хәкимйән ижадында, айырыуса уның пейзаж лирикаһында, сағылмай ҡалмаған. Шағирҙың тәбиғәт күренештәрен, йыл миҙгелдәрен һүрәтләгән айырым әҫәрҙәре хаҡлы рәүештә лирик миниатюра, этюд рәүешен алған ("Бар хистәрем һиндә", "Тыуған илем", "Моңом ҡалған", "Ғүмер миҙгелдәре" һ.б.).

Шуның менән бергә, матурлыҡ күренештәре авторға кеше менән кеше, кеше менән тәбиғәт араһындағы диалектик бәйләнештәрҙе, күңел торошон күрһәтеү мөмкинлеген биргән. Уларҙағы фәһемле, кинәйәле фекерҙе шәйләмәй булмай:

Кемдең был тәүге йәйелер,
Кемдең һуңғы көҙөләр?
Минең дә бит көҙөм еткән,
Әй, Хоҙайым, түҙем бир!

*("Ана тағы кoштар китә")*

Былай тип әйтергә тормоштоң әсеһен-сөсөһөн татыған, балалығы һуғыш йылдарына тура килгән әҙиптең лирик геройы мораль яҡтан хаҡлылыр. Шулай ҙа ул бирешмәй, яҙмышын тыуған еренең тауҙарына оҡшата, үҙе әйтмешләй, "йәшәүҙәрҙән биҙмәйенсә", аҡ өмөттәрен маяҡ итеп, алға бара. Уның күңеле көр, бөтөн. Йырлап атлай ул. Тормоштоң, йәшәйештең бөтә мәлдәренә, хәлдәренә тиерлек арнап йырҙар сығарған ул! Хатта стеналағы сәғәткә лә... ("Сәғәт").

Башҡаларынан айырмалы булараҡ, һүҙ алып барған йыйынтыҡтағы геройҙың күңеле һағыраҡ, моңһоуыраҡ, моңлораҡ. Уны хәҙер тормоштоң фанилығы ("Их, был ғүмерҙәр"), килер көндөң яҙмышы ("Ниҙәр көтә беҙҙе иртәгә?"), балаларҙың етемлеге ("Күңел илай") нығыраҡ борсой, туғаны Рауилдың фажиғәле ғүмере ("Шартлап һынды имән"), экологик проблемалар ("Тирәк ауҙы") һ.б. хафаға һала.

Былдай тематик төрлөлөк, һис шикһеҙ, юғары маҡсатҡа, матурлыҡҡа, рухи-әхлаҡи бөтөнлөккә ынтылыусы герой тәбиғәте менән аңлатыла. Ә уның күңелен һәр ваҡыттағыса уй-хистәр гаммаһы, тойғо-кисерештәр ассоциацияһы биләй. Ул үҙенең йәнендә тыуған яғының йәменән, кешеләрҙең изгелегенән яралған ижади манифесына әле һаман тоғро:

Тормош юлдарынан үткән саҡта
Тынмаһындар ине йырҙарым.
Яҡты нурҙар менән сиртһәм ине,
Кешеләрҙең күңел ҡылдарын.

*("Өҙгөләнмәйек, гармуным")*

Р.Хәкимйән шиғриәте ихлас. Был бигерәк тә әҙиптең халыҡта йөрөгән афористик фекерҙәрҙе, хәҡиҡәтте шиғыр юлдарына оҫта итеп һала белеүендә күренә. Әйтәйек, көндәлек тормошта йыш ҡулланылған лексик берәмектәр, һүҙбәйләнештәр, атап әйткәндә, шуларҙың яҙмыш, ғүмер,

һандуғас, ҡыр ҡаҙҙары, бәхет ҡошо, моңһоу аҡҡоштар, парлылар-парһыҙҙар кеүектәре айырыуса шағир ижад иткән йырҙарҙа йыш ҡулланыла. Ләкин улар ҡабатлау түгел, ә һәр осраҡта, һәр контекста үҙҙәренә генә хас булған биҙәктәр менән балҡып китә, фекерле хис уята. Шулар ярҙамында автор дөйөмләштереүҙәр яһай. Мәҫәлән, китаптың айырым иғтибарға лайыҡ булған ”Дүрт юллыҡтар” тигән өлөшөн, бер ниндәй икеләнеүһеҙ, ғүмер, шағир яҙмышы, ижад тураһындағы лирик-философик парсалар, балладалар тип баһалап була. Шуны иҫәпкә алып, ”Көҙгө урман” йыйынтығын нигеҙҙә ”Дүрт юллыҡтар”, ”Был донъяны нисек яратмайһың”, ”Һүндермәгеҙ усаҡты” бүлектәре тирәһендә ойоштороу, уларҙы алғы планға сығарыу отошлораҡ булыр ине. Сөнки Р.Хәкимйәндең һуңғы осор шиғриәте, фекер менән хистән туҡылған әҫәрҙәре тап шул өлөштәрҙә урын алған.

Китаптың ”Көҙгө урман” тип аталыуы, минеңсә, урынлы. Был исем йыйынтыҡ йөкмәткеһенең лейтмотивы булып тора, лирик геройҙың кәйефен сағылдыра. Көҙгө урмандың үҙ моңо, үҙ сере, үҙ емештәре була. Шуға күрә урман стихияһы, китапта шаҡтай күп ҡулланылған тау образына ҡарағанда, авторҙың характер сифаттарын, ижади йөҙөн нескәрәк, тойомлораҡ итеп асыуға ярҙамлаша. Урман образы, уның эстәлеге, күләме Р.Хәкимйән поэтикаһының тәрәнлеген, эпик киңлеген, бигерәк тә күҙгә күренеп бармаған эске драматизмын сағылдыра. Унда хистәр, уй-фекерҙәр спектры бар, изгелек менән яуызлыҡ араһындағы конфликт та сағыла. Автор берсә шатлана, берсә әсенә. Тик унда асыуланыуға, асырғаланыуға, төшөнкөлөккә урын юҡ. Унда яҡтылыҡ менән яҡшылыҡ хөкөм һөрә.

Һоҡланыу, матурлыҡҡа ынтылыу — шағирҙың шәхси сифаттары булыу менән бергә, уның поэзияһының да асылы. Был — шәхсәнлек менән ижад гармонияһы.

Р.Хәкимйән — барыһынан элек тыуған яҡ йырсыһы. Ул — туған тәбиғәтенә, яҡташтарына, замандаштарына ғашиҡ йән. Мөхәббәте лә шунан ярала, шуларҙан көс алып, йәйғор булып, донъяға тарала. Шағир быны үҙе лә йәшермәй, оло ғорурлыҡ менән былай ти:

Йәмле йәйҙә тыуғанғамы,
Күңелем изге, нурлы:
Ҡайғылар баштан ашһа ла,
Ғүмерем булды нурлы!
*(”Ғүмерем булды нурлы”)*

”Көҙгө урман” китабы — бының асыҡ сағылышы. Ул, үрҙә әйтелгәнсә, тыуған тупраҡ йылыһынан, шағир ихласлығынан яралған әҫәрҙәрҙән ғибәрәт.